Башҡортостандың Рәсәй дәүләтенә ирекле ҡушылыуына — 450 йыл

*Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ*

# НУҒАЙ ХАН

Кем ул Нуғай хан?

Быға яуап бирер өсөн алыҫ тарихҡа күҙ ташларға, башҡорт тарихының нуғай ҡатламдарын юллап ҡарарға кәрәк. Урта быуаттарҙағы урыҫ-башҡорт тарихи мөнәсәбәттәренең айырым сәхифәләре генә һаҡланған, байтағы рәсми ҡағыҙҙарға теркәлеп, архив туҙандарына күмелеп ҡалған. Ваҡыт күпселеген халыҡ хәтеренән юйған. Күп биттәре, ҡыҙғаныс-ҡа ҡаршы, мәңгегә юғалған. Шуларҙан ҡағыҙға төшкән, эҙләп тапҡан ҡәҙерлеһен ҡәҙерләп өйрәнеп, тарих хәтерен мөмкин хәтле күҙаллап ҡарағы килә был яҙмаларҙа.

Низән башларға?

Башта урыҫ тарихсыһы Н.И.Веселовскийҙың ”Алтын Урҙа төмәне Нуғай хан һәм уның заманы” исемле тикшеренеүенә, бүтән сығанаҡтарға таянып, төп ҡаһарманыбыҙҙың тәржемәи хәленән мәғлүмәттәр килтереп үтәйек.

Нуғай хан — тарих өсөн шаҡтай бәхәсле һәм ҡаршылыҡлы шәхес. Ул татар-монгол хан замандарының даулы һәм яулы өйөрмәләре уртаһында ҡайнаған, хәтәр яуҙарын кискән, сая дау-бәхәстәргә ингән, дәүләт башына олуғ хандарын ултыртышҡан һәм бәреп төшөрөшкән үҙ урҙалы хан дәрәжәһендә лә, ғәскәр башлығы әмир ҙә, ил-дәүләт баһадиры ла ул. Ханлығына һан булһа, батырлығына дан булған.

Һәр ил тарихсыһы үҙ ҡараштарынан сығып, Нуғай ханды үҙҙәренсә нарыҡлай: байтағы ололай, ҙур тарихи шәхес итеп таный, бәғзеләре яманлай, бары яу суҡмары итеп күрә, тарих күтәргән түбәнән түбәләп төшөрөргә ныҡыша, йәғни береһе лә битараф ҡалмай. Әммә уларҙың тәүгеләрен бигүк маҡтап, икенселәрен бөтөргәнсе битәрләп тә булмай, һәр кем һүнгән тарих көл-күмерен үҙ усағына тарта.

Шул хан замандарынан һаҡланып ҡалған тарих документтарын байҡабыраҡ ҡарағанда, Нуғай ханды урыҫ йылъяҙмаларында үҙҙәренсә батша (царь) тип, ислам яҙмаларында мәлик, тимәк, шулай уҡ батша тип атағанды күрербеҙ. Нуғай урҙаһы уны хан итеп таныған. Көнбайыш Европа, Византия рәсми ҡағыҙҙарында ла ул юғары титул исемдәре менән йөрөгән. Н.И.Веселовский Нуғайҙы даны, дәрәжәһе менән ҡайһы бер Алтын Урҙа хандарынан да сағыуыраҡ тип баһалай.

Нуғай хандың шәжәрәһенә, генеалогик яҙмаһына күҙ һалайыҡ. Мысыр, Сүриә сығанаҡтары уның атаһы Тутар (Татар), ҡартатаһы Магул (Могол), артабан Жучи (Джучи), Сыңғыҙ хан икәнен күрһәтә. Тимәк, Нуғайҙың тоҡомо шәжәрәһе мәшһүр Алтын Урҙа хандары аҫыл нәҫеленән килә. Әммә әлегә бының бер әтнәкәһен әйтмәй торайыҡ, урынына еткәс, аныҡларбыҙ.

Тарихта Нуғайҙың исеме Беркә хандың Кавказ тауы янындағы һуғыштары осоронан, яу яландарында күрһәткән батырлыҡтары менән бергә ҡалҡып сыға. Ниндәй яуҙар, ҡайһы осор ул? Шундай һорауҙарға яуап бирер өсөн Алтын Урҙа тарихының тәү осорон иҫләйек.

Был осорҙа инде Сыңғыҙ хан, уның артынса улы Батый хан Көнсығыш Европаны, башҡорт ерҙәрен, Волга, Дон, Днепр буйҙарын баҫып алып, урыҫ кенәзлектәрен дә үҙҙәренә буйһондорған оло яу йылдары күптән артта ҡалған. Себерҙән алып Дунай йылғаһы буйҙарынаса, көньяҡтан Кавказ тауҙары, Ҡара диңгеҙ ярҙарынан төньяҡта тундрағаса йәйелгән киңлектәрҙә Алтын Урҙа дәүләте барлыҡҡа килгән. Сыңғыҙ хан был дәүләт менән идара итеү эшен өлкән улы Жучиға тапшырған. Шуға был биләмәләрҙе икенсе төрлө Жучи дәүләте йәки олосо тип тә йөрөтәләр тарихта. Яуланған Урта Азия тарафтары Сығатай улына тейә, уныһы, ғәҙәттә, Сығатай олосо тип аталған.

Ошо XIII быуаттың урталарында монголдар тарафынан Һулағу хан юлбашсылығында Афғанстан, Иран территориялары, ғәрәп хәлифәтенең байтаҡ биләмәләре яулап алына һәм Һулағу исемендә икенсе мөстәҡил ҙур дәүләт — империя ойоша. Бындай ике ғәләмәт дәү империя менән алыҫтарҙан-алыҫ Монголиянан, Ҡараҡором тигән баш ҡалаһынан тороп олуғ хан-ҡаған, ҡоролтай хакимлыҡ ҡыла.

Ике бүре башы бер ҡаҙанға һыймаҫ, ти халыҡ мәҡәле. Ҡағаны, хандары нисек кенә бер нәҫел-туған булмаһын, дүрт-биш хан башы донъяның үҙе хәтле дәүләт ҡаҙанына һыйып бөтә буламы ни. Һәр ханлыҡ — үҙе бер ҙур дәүләт, һәр хан — үҙе баш, үҙе түш — ил башы. Беркә хан заманында, 1257—1266 йылдарҙа, Алтын Урҙа үҙаллы мөстәҡил дәүләт булып йәшәп ята, Иҙел (Волга) түбәнендә Һарай Беркә атлы баш ҡалаһын ҡороп, үҙ хакимлығын нығыта. Иран, Кесе Азия биләмәләрендә Һулағу хан үҙ илендә үҙе оло хужа, етмәһә, нәфсеһе алаптай, тағы күпкә ымһына. Хан бар ерҙә ҡан бар: бер олуғ ҡаҙанға, ҡитғаларға һыймаҫ хандар оҙаҡламай тағы ҙурыраҡ биләмә, оло хакимлыҡ өсөн дау ҡубара, төрлө һылтауын табып, бер-береһенә ҡаршы яу аса. Беркә хан Кавказ тауҙары аръяҡтарына уҡ йәйелергә ниәтләһә, Һулағу хан үҙ сиратында Ҡара диңгеҙ буйының төньяҡтарына ҡыҙыға.

Шулай ике диңгеҙ араһында Кавказ тауҙары буйында ике туған хан, тау тәкәләрендәй булып, мөгөҙгә-мөгөҙ сәкәшә. Туған туған да бит, мал-мөлкәт, ер-биләмдәр туған түгел. Әлеге хандар идара итеүҙәренең тәүге йылдарында бер-береһенә туғанлыҡтарын һаҡлай, үҙ-ара уртаҡ мәнфәғәттәрен яҡлай кеүектәр ине. Иранға бер булып ике тарафтан яу саптылар, Бағдадты бергә баҫып алдылар, еңеү дан-шәрифтәрен татынылар бит. Ләкин оҙаҡламай көтмәгәндә яр аҫтынан яу ҡупты.

Беркә хан Бағдадты алышҡас (унда бер ғәскәр башлығы булып Нуғай ҙа ҡатнаша), күпмелер яу трофей-улъяларын тейәп, үҙ иленә әйләнеп ҡайта. Һулағу хан, килешеүҙәре буйынса, дөйөм табыштан, яуланған илдән килер өҫтәмә дан-ғәниммәтте ебәрергә тейеш ине. Ләкин ҡәрҙәш хан быны ебәрмәй ҙә ҡуя — хан һүҙен боҙа. Нуғайҙың кәңәше менән Һулағуға илселек оҙатыла. Телдән, ҡағыҙҙа әйтелгәндән тыш, ишара өсөн ҡанатһыҙ уҡ менән билбауһыҙ аҫыл өҫ кейеме лә ҡушыла быға. Һулағу хан быларҙы нисек аңлағандыр, әммә ул яуап бирәһе, эште ыңғай хәл итәһе урынға илселәрҙе язалап үлтертә. Ул яуызлығы ғына етмәгән, хан ҙур ғына ғәскәре менән Каспий диңгеҙе буйлап Алтын Урҙа иленә аңғармаҫтан баҫып инмәһенме бер мәл.

Шуларға ҡарамаҫтан, туған менән туған, ҡәрҙәш ил менән ҡан-талҡан бәрелешмәҫ өсөн Беркә хан Кура йылғаһы янындағы сик буйы ғәскәрен, Кавказ тирәһе халҡын мал-тыуарҙары менән иле эсенә, далаларға күсерә. Шул саҡтағы ғәрәп тарихсылары яҙыуынса, Кавказ буп-буш тиерлек ятып ҡала. Ҡалған мөлкәтте талап, төрлө ергә һибелгән малдарҙы йыйып, үҙ еренә ҡыуҙырғандан һуң Һулағу хан Кума ярҙарына килеп сыҡһа, арьяҡта далала һанһыҙ Беркә ғәскәрен күреп ҡото алына. Ғәрәп яҙмаларынан ирмәк кенә шуныһы ла мәғлүм: Һулағу хан әле Терекка етәрәк үҙенең хан тирмәһендә иртүк уянһа, һауа бик тынсыу һәм ҡыҙыу икәнен тойоп, ярандарынан һорай икән: ”Нишләп һауа шул саҡлы иртүк ҡыҙыу?” — тип. ”Хан солтаныбыҙ, һауа ҡыҙыуы түгел был, Беркә ғәскәренең, аттарының тыны”, — тиҙәр быға. Һушы китә яҙа быға, шөр ебәрә хан тигәндәре. Ашап-эсеп тә тормай, йәһәт кенә кейенеп, үҙен ҡурғар яран-йорандары, һайлам бер төркөм ғәскәре менән артҡа һыҙыу, һырт биреү яғын ҡарай Һулағу. Ғәскәренә биргән әмер генәһе лә шул: әлегә уны ҡаплап торорға, үҙе Кура һыуының арьяғына сыҡмайынса, бер кемде йылғаға яҡынлатмаҫҡа! Ханһыҙ ғәскәргә һан бармы, хан үҙе ҡасҡаны ишетелгәс, ҡалған ғәскәре лә тырымтырағай артҡа һыҙыу яғын ҡарай. Ҡыйыуыраҡтарының арттан баҫтырып килгән ғәскәр менән алышҡылап ҡарауҙары ла ҡыйралыш менән бөтә. Арғы ярға сыҡҡанын, далаға һибелгәнен Нуғай төмәндең ун меңлек атлы ғәскәре турап үтә.

Яу ғәскәре артынан килгән Беркә хан йөҙ саҡырымдар һуҙымында күпме дошман ғәскәре ҡырылып ятып ҡалғанын, Терек йылғаһы буйында мәйеттәр ер ҡаплап ятыуын күреп: ”Монгол менән монголдың бер-береһен ҡылыстан сабып, һөңгөнән үткәреп үлтереүе Алланың Һулағу яуызға ҡарғышы ҡарыуы. Беҙ бер һүҙҙән булһаҡ, шунса көс-

ғәскәр менән бөтөн ер йөҙөн үҙебеҙгә буйһондорор инек”, тип бик үкенгәнен яҙып ҡалдырған Ибн-Вәсил атлы тарихсы.

Тағы шуныһы ғибрәтле: Беркә хан яуҙа ике яҡтан да ҡырылған яугирҙарҙы бер урынға йыйҙыртып, үлектәрҙе өс бейек өйөмгә өйҙөртә. Ике ҙур өйөмө — Һулағу һуғышсылары, өсөнсө кесерәге — үҙҙәренеке. Ул тауҙай үлектәр өйөмөн, әллә йөрәк өҙгөс асы ғибрәт өсөн, өҫтөн бер аҙ ғына ҡаплатып, ҡалған яғын шул көйө яланғас ҡалдыртҡан. Көҙгө ямғырҙарҙан, ҡаты елдәрҙән, ҡояштан үлек кәүҙәләр ҡаҡ аҡ һөйәккә әйләнгән. Үткенселәргә, сәйәхәтселәргә ул мәйеттәр тауы булып, тиҫтә-тиҫтә саҡырымдарҙан күренеп, һиҫкәндереп торған. Был яу яланы, мәйеттәр тауы Тимер ҡапҡа исеме менән тарихҡа инер (хәҙерге Дербент ҡалаһынан бигүк алыҫ түгел ер).

Аҙаҡ, әллә ысындан да Хоҙайҙың ҡарғышы төшөп, был яуға ярты йыл да үтмәй, Һулағу хан аяғын һуҙа. Уның урынына тәхеткә ултырған улы Абаға хан атаһының юлын ҡыуып, Беркә ханға ҡаршы йәнә яу сығара. Әйтерһең, ата урынына ултырған улан ханға ҡан менән яуап бирергә тейеш. Йәнәһе, үсен алырға бурыслы. Беркә был йәш ханға ҡаршы атаһы ғәскәрен ҡыйратҡан данлыҡлы Нуғай төмән ғәскәрен алдан ебәрә. Уға Сығатай хандың ейәне Ясултайҙың илле меңлек ғәскәре эйәрә. Шунса ғәскәрҙең ер ябып ябырылып килгәнен күргәс, Абаға хандың ҡобараһы осоп, яуһыҙ-ниһеҙ һырт биреүҙән башҡа сараһы ҡалмай. Нуғай төмән хан ғәскәрен ҡыуып етеп, бер-ике сәғәт эсендә ҡамаулап, ҡыйратып та ташлай. Үҙе бер хәтәр алыштың уртаһына инеп, тирә-йүне дошман атлылары менән уратылып ҡалғанда, дошман һөңгөһө сикәһен ҡаты яралап, бер күҙһеҙ ҡалыр.

Икенсе тапҡыр ҙур еңеү менән Нуғай төмән Беркә хан һарайына әйләнеп ҡайта. Иң атаҡлы баһадир тигән оло даны Алтын Урҙа дәүләтенең баш ҡалаһы Һарай Беркәнән ханлыҡтың меңәр саҡырымдарғаса һуҙылған биләмәләренә тарала. Нуғайҙың батыр яугирлығы Иҙел, Дон, Днепр буйҙарынан, урыҫ кенәзлектәренән тыш, империяның алыҫ көнсығыштағы монгол, ҡытай ил-ерҙәрен яңғыратып үтә.

Батыр яраһыҙ булмай тигәндәй, инде һыңар күҙле, әммә күпте күрер, күпте алдан тоҫмаллар Нуғай баһадирҙың ҡан-йән менән дауланған даны үҙен оло ил ағаһы, дәүләт башлығы итеп күтәрә.

Алтын Урҙа ил-йортон данлы һәм шанлы итешкән баһадирын Беркә хан бик юғары баһалай: уны Алтын Урҙаның алғы сиктәге, әлегә иң хәүефле көньяк-көнбайыш тарафына башлыҡ итеп ебәрә, уға бер оло дәүләттәй территорияны ышанып тапшыра. Бер йөмлә менән әйткәндә, үҙенең уң ҡулы, ғәскәри ил башлығы дәрәжәһенәсә күтәрә. Асылда Кавказ янында Һулағу хандың ғәскәрен ҡыйратыу иң беренсе сиратта Беркә хандың үҙ данын Яҡын Көнсығыш мосолман илдәре ҡаршыһында күтәреп ебәрә, Алтын Урҙаны Мысырҙың союздашы рәтенә ҡуя. Беркә хандың ислам динен Алтын Урҙаның рәсми дәүләт дине юғарылығына ҡуйыуы ла бик күп нәмә хаҡында һөйләй.

Был йүнәлештә лә алдан күрә белер Нуғай байтаҡ эштәр башҡара. Ул үҙен илсе-дипломат һәләте менән дә таныта. Берҙән, Һулағу хан-

дың Көнсығыш илдәренә яҫҡыныр яу ҡеүәһен һындырыуы айырыуса Мысыр илен оло хәүефтән, баҫып алыныуынан ҡотҡарыуға тиң ине. Икенсенән, Алтын Урҙа менән Мысыр илдәренең дипломатик бәйләнештәрен нығытыуҙы Нуғай үҙ өҫтөнә ала. Ул Беркә хан исеменән ике ил араһында илселек бағланыштарын юлға һала. Уның Мысырға яҙған хаттары ла һаҡланған. Аҙаҡ Нуғай Урҙаһында ханлыҡ ҡылған йылдарында, документтар раслауынса, Египеттың күренекле әмирҙәре Сутурус, Нурғас, Сәйфетдин Әбүбәкер менән ил-ара бағланыштарын уңышлы дауам итә.

Шуныһы ла характерлы, XIII быуатта урынлаштырылған Алтын Урҙа менән Египет араһындағы был дипломатик бәйләнештәр XIV быуатта мәмлүктәр династияһы дәүерендә оло бер халыҡ-ара традицияға әүерелә. Мәҫәлән, Египетта нығынған мәмлүктәр араһында Ғилметдин Сәнәнар Башҡорди әмир, Насретдин әл-Насыри ғалим һәм шағир булып танылa. Иҙел, Урал буйҙарынан күсеп киткән шағирҙар Сәйф Сараи, Ҡотб был илдә дан ала, уларҙың атаҡлы дастандары әҙәбиәтебеҙҙең бер алтын мираҫы булып һаҡланып ҡала. Мосолман илдәре, Мысыр, Сүриә менән дипломатик бәйләнештәре — Нуғай илсе эшмәкәрлегенең башланғыстары ғына әле былар.

Олуғ ил ҡағанһыҙ, олостары ханһыҙ булмаҫ. Алтын Урҙаның көнбайыштағы биләмәләренең иң ҙур өлөшөн Беркә хан Нуғайға тапшырып ҡуйғас, уның ысын мәғәнәһендә дәүләт эшмәкәрлеге йәйелеп китә. Нуғай үҙен ысын хан итеп тоя башлай. Дунай һыуы, Карпат тауҙары буйынан Днепрғаса һуҙылған ил-ерҙәрен үҙенсә ҡурғарлыҡ итеп нығыта. Һуңыраҡ Ҡырым ярымутрауын да үҙ ҡулына ала. Көнсығышта үҙ йоғонтоһон Тын йылғаһынаса еткерә. Әле ҡасан ғына Һулағу ғәскәрен ҡыйратҡан Төньяҡ Кавказ ерҙәренәсә иркен үтеп инә, Тимер ҡапҡа ҡәлғәһен нығытыша. Йәйгелек көтөү биләмәләрен Яйыҡ буйҙарынаса һуҙыу уға бер ни тормай. Яйыҡ буйында Һарайсыҡ хан ҡалаһын һалышырға ла ҡулы етә. Аҙаҡ ул хаҡлы рәүештә Нуғай ханлығы баш ҡалаһы булып китер. Шул уҡ ваҡытта нуғай, ҡыпсаҡ ырыуҙарының байтаҡ өлөшө Яйыҡ буйҙарына, тарихи Башҡортостан ерҙәренә икенсе тапҡыр күпләп күсенеү осоро Нуғай хан хакимлығы дәүеренә тура килә.

Нуғай үҙенең төп баш ҡалаһын Алтын Урҙаның иң көнбайыш сигендә, Дунай йылғаһының Ҡара диңгеҙгә ҡойған тамағына һалдыра. Ул ҡала тарихҡа Исакса исеме менән инә. Бында ул хан һарайын төҙөтә, бүтән зиннәтле йорттар, таш мәсеттәр ҡорҙора, көньяҡ ағастарынан бай баҡсалар менән күркәмләй. Ошонда үҙ исеменән аҡса һуҡтыра, Венеция, Генуя, Рим сауҙагәрҙәре менән сауҙа, йәрминкәләр үткәрә.

Шулай итеп, XIII быуаттың алтмышынсы йылдарынан Нуғайҙың хан дәрәжәһен тотҡан эштәре башлана. Был осорҙа ул күршеләш Болгария, Венгрия, Византия, Сербия дәүләттәрен дә ҡорал көсө менән буйһондора. Византия императоры Михаил VIII Палеолог үҙенең үгәй ҡыҙы Ефросиньяны Нуғай ханға кейәүгә биреп, үҙ-ара ғаилә, династия

ептәрен нығытырға тырышып ята. Тимәк, Нуғай хан Константинополдең аҫыл һарайҙарында, император резиденцияһында хан сифатында ғына түгел, кейәү буларак та ололап ҡаршы алына.

Көнбайыштың Тәреселәр һуғыштарынан һуң бөлөп, көсһеҙләнеп ҡалған Византия императоры кейәүе Нуғай хан менән хәҙер бер ҡатарҙан тороп, үҙенсә баш бирмәй булашҡан болғар, серб батшалары, мәмлүк солтандары менән дә аяҡ терәберәк һөйләшә. Урыҫ кенәзлектәренә лә метрополит итеп үҙе тәҡдим иткән кандидатураны — Максимды шул вазифаға еңел үткәртә.

Тәхеткә Мөңкә-Тимер хан ултырғас та Нуғайҙың ил-урҙа алдында абруйы ары арта ғына барҙы. Урыҫ тарихсыһы яҙғанса, аҡһөйәктәрҙең законлы һайланған ханы янына халыҡ Нуғайҙы ла ҡуш ҡуллап тәхеткә ултыртырға теләр ине. Әммә Нуғай һайлау хоҡуғы менән түгел, ә дәүләт эшмәкәрлеге кимәле менән хан итеп танылды. Рәсми ҡуйылмау хикмәте монголдарҙың династия ҡанунынан ғына.

Бындай фекер Нуғайҙың Мөңкә-Тимер хан дәүерендәге, 1266—1282 йылдарҙағы дәүләт эшмәкәрлеге менән тулыһынса раҫлана. Был осорҙа Алтын-Урҙаның көс-ҡеүәтен, мөһим тарихи ваҡиғаларын Яҡын Көнсығыш, Көнбайыш Европа илдәре, урыҫ кенәзлектәре менән Нуғай урҙаһы ханы Нуғайҙың башҡарған эштәре, илселек миссиялары, яу юлдары айырым асыҡ күрһәтә ала. Үрҙә күргәнебеҙсә, мәҫәлән, Византия менән тыныс һыйышып йәшәү мөнәсәбәттәрен дипломатик юл, хатта ғаилә-туғанлыҡ ептәре менән бәйләү ярҙамында еңелерәк хәл итә. Ислам илдәре, мәмлүк Египеты менән бағланышта дин берлеге, хәҙерге термин менән әйткәндә, мосолманлыҡ концепцияһын оҫта файҙалана. Һүҙ, уй-ниәт үтмәгән урында яу, ҡорал көсө ҡулланырға мәжбүр. Мәҫәлән, Болгария, Венгрия, Польша менән шулай тура килә. Ә бына урыҫ кенәзлектәре менән тарих һәм яҙмыштар бәйләнеше (беҙҙең ҡарашса, тарих ғилемендә әле төрлө яҡлап өйрәнелеп етелмәгән, йыш ҡына кире яҡтан нарыҡланған) ил, халыҡ-ара мөнәсәбәттәр ыңғай яҡтары менән бик үҙенсәлекле һәм фәһемле феномен. Тарихтан белеүебеҙсә, Сыңғыҙ менән Батый хандар, бүтән күп өлкә-илдәр кеүек, урыҫ кенәзлектәрен дә күпселеген һуғыш менән буйһондора.

Рәсми рәүештә хан итеп тәхеткә ултыртылмауының хикмәте шунда ғына — Нуғай монголдар ҡануны буйынса аҫыл зат тоҡомға ҡарамай, ул Сыңғыҙҙың кәнизәк ҡатынынан тыуған улан. Монгол ҡағанатының ҡануны буйынса, хан итеп фәҡәт монголдарҙың Сыңғыҙ нәҫеле затлы аҫыл уландар тармағы ғына тәхеткә ултыртылған, ә кәнизәктәренән тыуған уландар тәхеткә дәғүә итә алмаған. Аҙаҡ атаҡлы Аҡһаҡ Тимер ҙә бөтә дәүләтте тотоп торған оло хан дәрәжәһендә булһа ла, рәсми яҡтан әмир булып ҡына иҫәпләнгән. Иҙеүкәй әмир менән дә шундай хәл.

Урыҫ ерҙәренең төньяҡ өлкәләрендә яулап алынмаған кенәзлектәре лә ҡала. Монгол хандары күпселек илдәрҙе ҡорал көсө менән һуғышып алһа һәм әүәлге дәүләт ҡоролоштарын юҡҡа сығарһа, урыҫ кенәзлек-

тәрен ярым мөстәҡил хәлендә ҡалдыра. Улар Алтын Урҙаға мәғлүм бер күләмдә яһаҡ түләргә һәм кенәздәре кенәзлектәре менән идара итеүгә Алтын Урҙа ханынан ярлыҡ алырға тейеш була.

Шулай итеп, Алтын Урҙа менән урыҫ кенәзлектәре араһында үҙ-ара һыйышып тыныс йәшәү, хеҙмәттәшлек шарттары барлыҡҡа килә. Батый хан, уның артынса Беркә хан урыҫ кенәзлектәрен Көнбайыш Европанан тевтон илбаҫҡынсыларының һөжүменән үҙенсә бер ҡалҡан кеүегерәк тә күрә һәм быны таһыллы файҙалана ла.

Үҙ урҙаһында төпләнеп хакимлыҡ итә башлаған Нуғай хан шималдан күршеләш урыҫ кенәздәре менән тығыҙ бәйләнештә килешеп йәшәү, үҙ-ара дуҫлыҡ, кәрәк саҡтарында хәрби булышлыҡ сәйәсәтен тота. Ул Киев кенәзе Дмитрий менән ысын дуҫлыҡ, союздашлыҡ мөнәсәбәттәрен урынлаштыра. Ары күршеләш Галиция кенәзе Даниил Галицкий менән дә уртаҡ тел таба, көнбайыштан яу килгәндә берҙәм яуҙаш булып күтәреләләр.

Новгородтың йәш кенәзе Александр Ярославович Балтик диңгеҙе ҡултығында Нева йырҙары буйында швед баҫҡынсыларын бер ҡаты яуҙа еңеп, Александр Невский атлы атаҡлы хәрби башлыҡ булып танылғас, Нуғай хан уның менән тағы тығыҙыраҡ бәйләнеш урынлаштыра. Тевтон ордены илбаҫарҙарын Александр Невский Чуд һәм Илмән күлдәре өҫтөндә ҡыйратып ташлағас, улар бер-береһен хөрмәт итеп, дөйөм дошманға ҡаршы ҡоралдаш һәм яуҙаш булып уҡ китәләр. Әүәле Александрҙың ҡыпсаҡ кенәзе Берәсәк ҡыҙына өйләнеүе ҡан ҡәрҙәшлек ептәре менән дә бәйләй. Шуға Нуғай хан Александр Невскийҙы үҙ кейәүе кеүек күрер. Аҙаҡ бер улына Александрҙың ҡыҙын килен итеп алып, ҡоҙалар булып китерҙәр.

Александр Невскийҙың вафатынан һуң атаһы урынына Мәскәү кенәзлегенә кесе улы Даниил Урҙанан ярлыҡ алып ҡайта. Даниил Александрович Мәскәүҙе баш кенәзлек итеү маҡсатынан, күрше кенәзлектәр менән конфликттарға инә, сапҡын яһап, үҙенә буйһондороп та ҡуя; шулай үҙ-ара һуғыш, тартыштар көсәйеп китә. Байтаҡ ҡына урыҫ кенәзлектәре яҡлау һәм ярҙам һорап, Алтын Урҙа ханына мөрәжәғәт итә. Хан, йәнәһе, ярҙамлашырға тип ҡоралды отрядтар ебәреп, бер нисә кенәзлектә яу ҡубарып, йорт-ерҙәрен талап, хәлде тағы ҡырҡыулаштырып, ҡанлы һуғышҡа әйләндереп ебәрә.

Бына ошондай иң киҫкен яу-янъяллы осорҙа Мәскәү, Тверь, Коломна, Можайск, Переяславль, Новгород, Владимир, Суздаль, Муром кенәзлектәре туранан-тура Нуғай урҙаһына, Нуғай ханға ярҙам, ғәскәр һорап илселәр ебәрә. Заманында Алтын Урҙа үҙ маҡсатынан сығып ҡабыҙған һәм урыҫ кенәзлектәрен үҙ-ара талаштырып, һуғыштырып көсһөҙләндереүгә һәм тарҡатыуға ҡоролған мәкерле сәйәсәтен туҡтатыр өсөн — дөрөҫөрәге, үҙ мәнфәғәтенә ярашлы рәүештә — Нуғай хан һайланма ғәскәре менән Мәскәүгә килеп, үҙ-ара яулашҡан кенәздәрҙе йыйып, яу-янъялды тыныс юл менән хәл итеүгә өлгәшә. Шул уҡ ваҡытта, бик аҡыллы эш итеп, урыҫ дәүләтселегенең Мәскәү кенәзлеге тирәһенә ойошоп нығыныуына Нуғай хан күп көс һала. Икенсе

яҡтан, хәйләкәр хан урыҫ кенәзлектәре менән берлектә үҙ урҙаһы көсөн һәм абруйын да арттыра.

Ул заманда, бигерәк тә XIII быуаттың икенсе яртыһында Нуғай урҙаһына һәм урыҫ кенәзлектәренә оло яу-хәүеф көнбайыш тарафынан, көсәйеп барған Польша, Литва, Венгрия илдәренән янай. Был сиктәрҙә яу-сапҡындар әленән әле сыға тора, шул яҡ биләмәләр ҡыҫыла, сапҡындарҙан әллә күпме ауылдар, ҡалалар янып, таланып, көл-күмер булып ятып ҡала, ил-йорт оло зыян күрә, бөлә.

Нуғай хан 1282 йылда Польша пандарына ҡаршы беренсе походын ойоштора. Дошманының сик буйы ғәскәрен ҡыйратып, эскә үтеп инеп, яу улъялары тейәп, әсирҙәр алып ҡайта. Польша короле йәнә яу-яҫҡын менән йотата башлағас, Нуғай хан Алтын Урҙаның Түләбуға ханы менән берлектә ҙур ғәскәр туплап, икенсе походҡа сыға. Был юлы үҙенең урыҫ союздаштарынан Волынский, Лев һәм Мстислав Данииловичтар, Владимир Васильевич кенәздәр атлыларын да ҡушып, ҡеүәтлерәк көс менән Люблин, Мазова ҡалаларын яулап, Висла йылғаһы аша сығып, тәрәнгә үтеп инәләр. Баш ҡалалары Краковты уратып алалар. Бейек таш ҡәлғәле, күп ғәскәрле Краковты ай тирәһе ҡамап торалар ҙа, тирә-яҡтағы, баҫып ингән юлдарҙағы байлыҡты тейәп, яндыраһын яндырып, ҡыйратаһын ҡыйратып, мул улъя, күп әсир менән илдәренә әйләнәләр. Львов, Перемышль ҡалалары аша Нуғай хан үҙ ғәскәрҙәре менән үҙ урҙаһына йүнәлә. Урыҫ кенәздәре отрядтарына ла ҡайтыр юл яҡын. Ә бына Түләбуға ханға ғәскәре менән Иҙел буйынаса меңәр саҡырым юлдар үтәһе бар. Түләбуға хан шул хәтле ғәскәре менән Нуғай хандан айырылғас, юл башынан уҡ аҙашып, айға яҡын тау араһында бутала, тау-ташлы юлда, һалҡында ыҙалар сигеп, асығып, унар меңләгән ғәскәрен юғалта. Далаларға килеп сыҡҡас та һыуыҡтан, аҙыҡ етмәгәнлектән тағы күпләп ҡырыла аты ла, ғәскәре лә.

Был хәйерһеҙ, уңышһыҙ яу сәфәрен Түләбуға хан үҙ булдыҡһыҙлығынан күрәһе урынға, Нуғайҙан нисек тә үс алыу юлдарын эҙләй башлай. Ә шул араларҙа Нуғай икенсе тапҡыр Венгрияға походка юллана. Дунай буйындағы Пештҡа уҡ барып етә. Нуғай хандың урыҫ кенәзлектәре менән берләшеп Польша, Венгрия, Сербия илдәренә һөжүм итеүе шул заманда Ватикан папаһы Урбан IV һәм Көнбайыш Европа королдәрен оло хәүефкә һала. Шул уҡ ваҡытта Нуғайҙың атаҡлы баһадир ғына түгел, Алтын Урҙаға хакимлыҡҡа ынтылыр, бер ханды икенсеһе менән алыштырыр үҙаллы бер хан дәрәжәһенә әйләнә барыуы Һарай Беркәне хәүефләндерә башлай.

Кем көслө — ханды шул ҡуя, кем үсле — ҡанды шул ҡоя тигән мәҡәл, бәлки, нәҡ шул Нуғай хан заманында сыҡҡандыр. Әле ҡасан ғына Мөңкә-Тимерҙе тәҡәллефләп үҙе тәхеткә ултыртҡайны. Уның менән күпме бергәләп яу саптылар. 1280 йылда ул донъянан үткәс, улы Тыуда-Мөңкәне тәхеткә ҡунаҡлатты. Былыһы ысынлап та бары ваҡытлы ҡунаҡлар ҡунаҡ ҡына ине. Тәхет тип, ханлыҡ тип иҫе лә китмәне. Ханлыҡ дилбегәһен тотошлай Нуғай ханға тотторҙо ҡуйҙы. Үҙе исламдың суфыйсылыҡ мәҙһәбе менән мауығып, дәрүишлек юлына ылы-

ғып китте, ил-йорт, тәхет түрендә ҡайғы-йүне булманы. Аҙаҡ башҡуллай тәхеттән баш тартты. Унып урынына Нуғай Түләбуғаны хан итеп ултыртҡайны.

Башта Түләбуға менән бик татыу йәшәнеләр, ил менән ханлыҡ вазифаһын кәңәшләшеп башҡарҙылар, бергәләп яу саптылар. Әллә шул әлеге Польша, Венгрия походынан ҡайтышлай үҙ булдыҡһыҙлығы арҡаһында оҙон юлда ярты ғәскәрен юғалтыуын Нуғай хан мәкеренә юрап, аралары һыуынды. Аҙаҡ Нуғайҙы эҙәрлекләй башланы, Һарай Беркәнән, тәхет, идара тирәһенән ситләштерҙе.

Кемдең кем икәнен танытыр өсөнмө, эҙәргә-эҙәр, үскә-үс итепме, Нуғай хан ғәскәре менән бер мәл баш ҡалаға килеп төшә лә, мөрәүәтһеҙ Түләбуғаны, изгелеккә яуызлыҡ хаҡын түләткәндәй, тәхетенән төшөрөп, тәхет дәғүәсеһе Тоҡта ҡулына хөкөмгә бирә. Түләбуға хан язалап үлтерелә. Был быуаттар аша килеп еткән бер фараз.

Урҙаһына әйләнеп ҡайтышлай ғәскәре менән Ҡырым ярым утрауына һуғылып, һуңғы йылдарҙа баш бирмәй булашҡан баҫҡағын ышаныслы кешеһенә алыштырып, Генуя, Венеция сауҙагәрҙәренән күптән түләнмәй килгән дан-бурыстарын түләтеп, идара эштәрен тейешле юлға һалышып, ил-йортҡа кем ысын хан икәнен танытып сыға Нуғай хан.

Шул хан замандары ваҡиғаларын яҡшы белгән ғәрәп тарихсыһы Роҡҡәд-Бейбарс юғарылағы тәхет түңкәрелеше серҙәрен ҡағыҙға анығыраҡ теркәп ҡалдырған. Роҡҡәд-Бейбарс бәйән итеүенсә, баш бирмәгән Түләбуға ханды ауыҙлыҡлар өсөн Нуғай хан мәкерлерәк тоҙаҡ ҡора. Йәнәһе, Нуғай хан башта Түләбуға хандың әсәһе менән күрешеп һөйләшә һәм уға шундайыраҡ кәңәш бирә: ”Үҙегеҙ яҡшы беләһегеҙ, ханша бейем, улығыҙҙы үҙ бойороғом менән тәхеткә үҙем ултырттым. Әммә Түләбуға һуңғы ваҡытта олуғ изгелегемде онотоп, мине һанламай башланы, минең дошмандарым ҡотҡоһона бирелде. Ул әле йәш, күп нәмәне аңламай, олуғ ханлыҡ вазифаһының һәм идара итеүҙең бөтә нескәлектәрен белмәй. Былар хаҡында мин улың менән бер ултырып һөйләшер, тейешле кәңәштәремде бирер инем. Беҙ фәҡәт аулаҡта, ят күҙ, ят ҡолаҡтарҙан ситтә күрешер инек, уның яғынан бик ышаныслы һәм ҡурғаулы кешеләре менән генә бергә”, — тип.

Олуғ зат кәңәшен тотоп, ханбикә әсә улын Нуғай хан менән аулаҡта осрашып һөйләшергә күндерә. Әммә ләкин, килешеүҙәренсә, бер төнөн һил урында унлап атлы һыбай һаҡсылары менән килгән Түләбуғаны һөйләшәһе урында тота ла тотҡон итеп Тоҡта ҡулына тапшыра: ”Быуа һин ултыртылаһы урында миңә яҡшатланып тәхеткә ултырған туғаныңды үҙ ҡулыңа бирәм. Уның менән аҫтыртын кәңәшләшеп, һине үлтерергә йыйынған энеләреңде лә үҙ ҡулыңа тапшырам. Хаяһыҙ мәкерҙәре өсөн яза бирмәк һинең ҡарамаҡта”, — ти Тоҡтаға.

Атаҡлы фарсы тарихсы Рәшитетдин был тәхет түңкәрелешен бөтөнләй башҡа төрлөрәк хикәйәләй: Нуғай ханды Алтын Урҙала иң абруйлы ил ағаһы, арҙаҡлы түрә хан күреп, Тоҡта уғлан уға мөрәжәғәт итә: ”Хан заты, ағай-энеләрем мине үлтерергә ниәтләй, шуға һеҙҙе иң олуғ ил ағаһы күреп, миңә хасланған ағай-энемдәренең ҡулдарын ҡыҫҡар-

тыуҙы, мине аралауығыҙҙы үтенәм. Иҫән-һау ҡалһам, мин һеҙгә ғүмерем буйы рәхмәттәр уҡыр, ҡулымдан килер бөтөн ярҙам-шәфҡәттәремде күрһәтер, һеҙгә тоғро хеҙмәт итер инем", — тип ант-вәғәҙәләр бирә.

Үҙенә ҡаршы үсләшә башлаған Түләбуға ханды тәхетенән төшөрөр өсөн кесе ҡоролтай йыйырға ҡарар итә Нуғай хан. Унда һәр ҡорҙаш-туғандаш тарафтарға килешер шундай нотоҡ тота: "Минең ҡартлығым яҡынлап килә, инде төрлө яу-дауҙарҙы, талаш-низағтарҙы тамсы ла хупламайым, йәнгә, донъяға, илгә тыныслыҡ, имен-аманлыҡ кәрәк. Мин илемә хәлемдән, башымдан килгәнсә хеҙмәт иттем, кәңәш итер аҡылым, оло тәжрибәм бар. Сынғыҙ олуғ ханыбыҙҙың төп ҡанунында шулай тиелгән: "Әгәр ил-олосто тарҡатыуға, янъял-тартышҡа этәреүсе бар икән, уны дөрөҫ юлға күндерергә һәм үҙ-ара килешеүгә килергә кәрәк".

Нуғай хандың ошондай мәғәнәле фекер-кәңәштәре тарих яҙма анналдарына теркәлеп ҡалған. Был Түләбуға — Нуғай — Тоҡта хан мөнәсәбәттәренә бағлы өс төрлө мәғлүмәт-варианттарҙың ҡайһыһы тәғәйен дөрөҫөрәктер, уларҙы киҫә әйтеүе ауыр. Хәҡиҡәт урталыҡта яталыр. Һәр хәлдә, тарихи ваҡиғалар Түләбуға хандың тәхеттән төшөрөлөүе, хатта үлтерелеүе, ә Тоҡтаның 1291 йылда тәхеткә Нуғай хан ярҙамында ултырыуы менән ослана.

Тәүге фараз — Түләбуға хан менән бергә Тоҡтаның ағай-энеләре лә үлтерелә тигән версия тарихи хәҡиҡәткә тура килмәй. Ул Нуғай хандың хас дошмандары уйҙырмаһы, моғайын. Сөнки уның ағай-энеләре Тоҡта хан тәхеткә ултырғанда барыһы ла иҫән-һау була. "Нуғай 690-сы йылды (милади 1291) Тоҡтаны хан итеп ултыртты, аға-энеләре Борлоҡто, Һарайбуғаны, Түдәне Тоҡта янында хеҙмәткә урынлаштырҙы", — тип яҙылған Роҡҡәд-Бейбарс мәғлүмәттәрендә. Улай ғынамы, әлеге уландар үҙҙәре тәхет даулап, бер заман Тоҡта ханды үлтерергә йыйынғанда, ул Нуғай хан урҙаһына ҡасып ҡотола. Нуғай хан икенсе тапҡыр Тоҡтаны тәхетенә яңынан ултырта. Күрәһең, шунан һуң ғына теге тәхет даулаған ағай-энеләр язалап үлтерелә.

Кемгә тәхет — кемгә ләхет, тип халыҡ юҡҡа ғына әйтмәгәндер. Төрлө илдәрҙә, төрлө замандарҙа ғүмер баҡый тәхет тирәһендә ыҙғыш-талаш, үлтерештәр йыш булып торған. Алтын Урҙа тәхете үҙе генә лә был хаҡта күп ҡанлы-үлемле алмашыныуҙарҙы һөйләй. Нуғай хан заманында ғына ла Алтын Урҙа тәхете тирәһендә күпме ҡандар ҡойолған: Батый хандың улы Сәртаҡ хан юлда билдәһеҙ шарттарҙа үлеп ҡала, уны алмаштырған Улағсы хан да бер йыл эсендә йән бирә, Мөңкә-Тимер яу юлында һәләк була, Түләбуға хан язалап үлтерелә, Тоҡта хан үҙе бер йәлләткә әйләнә.

Хан бар ерҙә ҡан бар, тәхет аҫтында ләхет бар, ике хан бер илгә һыймаҫ. Ошо хәҡиҡәттәр Нуғай хан менән Тоҡта хандың артабанғы мөнәсәбәттәрендә һәм яулашыуҙарында тағы бер ҡат ҡәтғи раҫланыр. Улар, гүйә, ошо ике хандың ҡанлы-янъяллы алыштарының ғибрәтле һабағы булып сығарылған һымаҡ хатта ки.

Үҙен тәхеткә ултыртҡан, улдары яҫҡыныуынан һаҡлап ҡалған Нуғай ханды Тоҡта хан башта хөрмәт итмәй, дуҫ булып күренмәй бул-

дыра алмағандыр. Тәхетендә нығына һәм Алтын Урҙаның ҡеүәте арта бара, ике хан башы бер илгә һыймаҫ тигәндәй, Тоҡта хан Нуғайҙың көс-ҡеүәтен сикләр һәм юлынан алыр әмәлдәрен эҙләмәй оҙаҡҡа һуҙмағандыр.

Бер әмәле бер заман Нуғай урҙаһы яғынан сыға. Нуғай хандың Байнаҡ исемле ханбикәһе, көндәш ханбикәһенең Ек (Жик) менән Текәй атлы уландарының хаслашыуҙарынан ҡурҡып, Тоҡта ханды иренә һәм ошо уландарына ҡаршы ҡоторта. Үс иткәндәй, быға икенсе бер ваҡиға ла килеп ялғана: Тоҡта хан менән ниндәйҙер мәсьәләләрҙә килешмәйсә һәм бының өсөн хандарының үс алыуынан шөрләп, өс-дүрт атаҡлы әмире Һарай Беркәне ташлап ҡасып, Нуғай ханға килеп һыйына. Тоҡта хан уларҙы кире ҡайтарыуҙы талап итһә лә, Нуғай үтәмәй. Киреһенсә, был әмирҙәргә өҫтәмә ғәскәрҙәр биреп ҡуя, үҙҙәренә атап ерҙәр бүлә. Ике әмирҙе үҙенең ҡыҙҙарына өйләндереп, яугир кейәүҙәре яһай.

Икенсе тапҡыр ҡаты киҫәтеп, илсе ебәрә Тоҡта хан. ”Һис кисектермәй әмирҙәрҙе кире ҡайтарырға бойорҙо олуғ ханыбыҙ, — ти илсе. — Бына инаныс һәм ишара өсөн һуҡа, уҡ, бер ус тупраҡ ебәргәне”.

Тиҙ генә үҙ ил аҡһаҡалдарын, үҙ ғәскәр башлыҡтарын һәм ҡасып килгән әмирҙәрен йыйып ала хан. Ҡорҙағылар һәр береһе үҙ кәңәшен әйтә һәм ишара нәмәләрҙең үҙҙәренсә мәғәнәһен аңлата.

Аҙаҡта Нуғай хан үҙе былай ти:

— Бар хикмәт бынау нәмәләрҙә. Тик һеҙ уның төп айышын яҙа-йоҙа әйттегеҙ. Мин Тоҡта хандың ниәтен яҡшыраҡ беләм. Һуҡа тигәне — һеҙ ул тараф ерҙәргә тәрәнтен йәбештегеҙ — һеҙҙе мин ошондай һуҡа менән һөрөп сығарырмын. Уҡ тигәне — әгәр һеҙ үҙегеҙҙе хәҙер бейек күктәрҙә осабыҙ икән, тип уйлаһағыҙ, һөйәк башаҡлы уҡтарыбыҙ менән атып төшөрөрбөҙ. Бер ус тупраҡ иһә, ер өҫтөндә барыбер бер осрашырбыҙ, тигәне ул.

Ҡорҙағыларға хандары аңлатҡанды хупларға ғына ҡала.

Илсене имен-аман ҡайтарып ебәргәндә хан шуны әйтә:

— Тоҡтаға шуны еткер: беҙҙең аттар сарсаған һәм эйәрләнгән, тиҙҙән Тын һыуында һуғарырбыҙ. Унан хан тәхетенә лә юл йыраҡ ҡалмаҫ!

Хан һүҙе бер булыр: бер-ике көн эсендә оҙон юлға тартылырҙар. Төмән-төмән ғәскәрҙәре ил-далалар ябып барыр. Нуғай хан тиҙҙән Тоҡта хан ҡаршыһында үҙенең кемдең кем икәнен танытыр. Был хаҡта тағы Роҡҡәд-Бейбарс яҙмаларына һылтанайыҡ әле: ”Нуғай оҙаҡ замандар буйы Беркә илендә сикһеҙ хоҡуҡтарға эйә ил хакимы булды. Үҙенә оҡшамаған хандарҙы тәхеттән алып ташланы, оҡшағандарын ултыртты. Ул алдағы замандарҙа ла шулай хакимлыҡ итергә ниәтләне, оло урҙаның ханы булып ҡалырға уйланы. Ләкин Тоҡта бындай хәл менән килешә алмай башланы, яулашырға булды”.

Тарихта 1297—1298 йылдар араһында Нуғай хан менән Тоҡта хандың ике яҡтан, бәлки, йөҙәр меңгә еткән ғәскәрҙәре ҡара яу булып бер-береһенә ябырылды. Нуғай ғәскәре еңеп сыҡты, дошманын Дон аръяғына, Волга буйҙарына ҡасып ҡотолорға мәжбүр итте. Үҙе ғәскәре менән, бик күп улъя тейәп, урҙаһына әйләнеп ҡайтты.

Аҙағырак Акташ исемле ейәнен етерлек ғәскәр менән Кырымға дан йыйырға ебәрһә, Генуя сауҙагәрҙәре уларҙы һыйлаған булып, аракы эсереп иҫертеп, кырып һалалар. Быға яуап итеп, Нуғай хан үҙе ғәскәре менән килеп, сауҙагәрҙәр өйөрөн кылыстан үткәреп, мал-мөлкәттәрен тартып алып, йорт-ерҙәрен яндырып, тағы яу улъяһы, байлык алып кайта. Кәрәк сағында урҙанан йөҙ меңгәсә ғәскәр йыя алған, яу ойоштorған ил шул һуғыштарҙан килгән мал-байлык иҫәбенә йәшәй. Еңеүҙән килгән улъя-байлык та аҙындыра ғәскәрҙе. Уны бүлешкән сактарҙа ла үҙ-ара төрлө низағтары килеп сыккылай тора, бер-береһенә үсләшеү, ғәскәре менән дошман яғына сығып китеүҙәр булғылай.

Шундай шарттарҙа Нуғай хандың утыҙ меңлек ғәскәре Токта хан яғына касып китә. 1300 йылдың 15 сентябрендә Куканлык тигән яланда Нуғай хандың калған ғәскәре менән Токта хандың дошманы иҫәбенә кеүәтләнгән ғәскәре йөҙгә-йөҙ, кылыска-кылыс килеп бәрелешә. Һуғыш кыҫка һәм каты була.

Нуғай хандың үлеме үҙе калай аяныслы! Тарихсылар Нуғай ханды үлтереүсе ауыҙынан тиерлек һуңғы алышты һәм һәләкәтте былай бәйән кыла: "Нуғай бер үҙе дошман тарафынан уратылған хәлдә аҙаккаса алышыуын дауам итә. Бер һыбайлы уның боғаҙына кылысын килтереп терәй. Шул мәл Нуғай телгә килә:

— Мине үлтермәй тор, мин Нуғай хан булам. Үҙеңдең ханың Токтаға илт! — ти.

Ләкин атлы капыл кирелеп, Нуғайҙың муйынын өҙә саба. Ергә тәгәрәп төшкән канлы башты тотоп, Токта ханға илтә:

— Бына һиңә Нуғай башы, — тип һона. — Ул миңә, Нуғай ханмын, мине үлтермә, ханға илт, тине.

Токта былдай яуапка иҫе китеп:

— Был яугирҙың үҙенең башын киҫергә! Аҫыл зат хандың башын киҫкәне, бөйөк әҙәмдең һүҙен һанламағаны өсөн! — тип бойора.

Быға аптырабырак калған ярандарына асыклап шуны ла өҫтәй:

— Улар өсөн генә түгел, хан башына хак булмаҫ һабак өсөн төрлө кара-короға! Бүтән былдай башка һыймаҫ яманлык кабатланмаһын өсөн!"

Нуғай хандың улдары аҙак күпмелер ғәскәр туплап, Нуғай урҙаһын яңынан аякка баҫтырыу өсөн байтак яулашып карайҙар. Аҙак бер улы калдык ғәскәре һәм ырыуҙаштары менән Көнбайыш илдәренә каса. Турай исемле улы калған урҙа халкы менән кутарылып, Иҙел кисеп, Волга менән Яйык араһына, аҙак Дон буйынаса, төньяк-көнсығышта Урал тауҙарынаса һуҙылыр яңы ерҙәрҙә Нуғай урҙаһын аякка баҫтырыр. Быныһы инде — икенсе дәүер, икенсе урҙа.

## Хан Ногай

В преддверии празднования 450-летия добровольного вхождения Башкирии в состав России значительно возрос интерес к древней истории края. Наш постоянный автор академик Гайса Хусаинов в увлекательной форме повествует о жизни и деятельности известной личности того периода хане Ногае. Кто он, основавший на обломках Золотой Орды новое ханство, протянувшееся от Южного Урала до Черного моря и Каспия?

Ногай относится к династии чингизидов и его родословная через отца Тутара, деда Могола, прадеда Джучи восходит к самому Чингис-хану. Его столица Исакса располагалась в устье Дуная, другая столица Сарайчик — на берегу Яика. Крым также входил во владения Ногая. Хан выстраивал весьма сложные отношения с русскими княжествами, часто воевал с ними, также часто вместе с князьями отражал нашествия поляков, литовцев, дважды ходил с походами на Венгрию. Проведя всю жизнь в войнах, Ногай-хан погибнет в 1300 году во время сражения с Токта-ханом. После этого ханство просуществует еще два с половиной века и развалится из-за междоусобиц накануне падения Казани, когда наследник ханского престола Исмаил пойдет войной на своего брата Юсуфа — противника Москвы, разобьет его войска и заявит о своем нейтралитете. Ногайцы уйдут и с Урала.

## Khan Nogai

On the threshold of celebration of the 450th anniversary of voluntary joining of Bashkiriya to Russia the ancient history of our country has seen a revival. Our constant author academician Gaisa Khusainov tells about the life and activity of khan Nogai, a famous personality of that period. Who is he, who formed a new khanate out of wrecks of the Golden Horde, spreading from the Southern Urals to the Black and Caspian seas?

Nogai refers to the dynasty of genghisids and his genealogy from his father Tutar, ancestors Mogol and Dzhuchi traces back to Genghis khan. Isaksa, a capital of his khanate, was situated at the Dunai mouth, and another capital — Saraichik — on the bank of the Yayik. The Crimea was also in the possession of Nogai. Khan established quite complex relations with Russian principalities, often fought against them; also he repelled invasions of the Poles, Lithuanians together with them; twice campaigned in Hungary. Fighting all his life, Nogai-khan was killed during the battle against Tokta-khan in 1300. After that the khanate existed for a period of two and a half centuries and was ruined over internecine strives on the eve of downfall of Kazan, when Ismail, a heir of the khanate throne, waged war against his brother Yusuf, who was opposed to Moscow, defeated his troops and declared the neutrality. Nogai people left Ural.